# **Тема.** Ислам – донъя мәҙәниәтенең бер өлөшө

Маҡсат. Ислам диненә төшөнсә биреү, Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең тормош юлына һәм эшмәкәрлеге менән таныштырыу, ислам ҡанундарына байҡау яһау.

Йыһазландырыу. Презентация «Ислам – донъя мәҙәниәтенең бер өлөшө», Ҡөрьән китабы, Ҡәғбә һүрәте, календарь.

## Дәрес барышы.

I. Ойоштороу моменты.

II. Өйгә эште тикшереү.

Һорауҙарға яуаптар:

1) Башҡорттар нимәгә ышанғандар һәм нимәгә табынғандар?
2) Ниндәй дини йүнәлештәр бар?
3) Зороастризм дине тураһында һөйләргә.
4) Буддизм диненең барлыҡҡа килеүе.
5) Христианлыҡ тураһында мәғлүмәт бирергә.

III. Яңы теманы өйрәнеү.

Уҡытыусы. Беҙҙең милләт – башҡорт. Беҙҙе мосолмандар тип йөрөтәләр. Ә динебеҙ ниндәй?

Уҡыусы. Ислам.

Уҡытыусы. Эйе. Бөгөн беҙ һеҙҙең менән ошо динебеҙ тураһында өйрәнеп китәйек. Теманы яҙып ҡуяйыҡ (2 слайд). Ә хәҙер ислам дине тураһында тыңлап китегеҙ.

Ислам – ғәрәп утрауының көнбайышында барлыҡҡа килгән дин. Бында иң ҙур ҡалаларҙың береһе – Мәккә урынлашҡан. Мәккәлә бик көслө көрәйеш ҡәбиләһе йәшәгән (3 - 4 слайдтар).

Уҡытыусы. Алла тарафынан ебәрелгән шәхесебеҙҙең исеме кем?

Уҡыусы. Мөхәммәт бәйғәмбәр.

Уҡытыусы. Эйе. Мөхәммәт бәйғәмбәр сығышы менән ошо ҡәбиләгә ҡарай.

Исламға тиклем ғәрәптәрҙең һәр ҡәбиләһенең үҙ аллаһы булған. Ләкин, шулай ҙа, улар бөтәһе лә Ҡибланы изге урын тип һанаған. Сөнки Ҡиблала күктән төшкән таш ятҡан. Уны Ҡәғбә тип йөрөтәләр ( 5 слайд). Дин әһелдәре был ташты алла ебәргән тип аңлаталар. Аҙаҡ Ҡибла бөтә мосолмандар өсөн изге урынға әйләнә.

Уҡытыусы. Уҡыусылар Ҡибла ҡайһы яҡта ул?

Уҡыусы. Көньяҡ-көнбайышта.

Уҡытыусы. Дөрөҫ.

Мөхәммәт бәйғәмбәр – реаль тарихи шәхес. Ул 570 йылда Мәккә ҡалаһында тыуған (6 – 8 слайдтар). Уның атаһы урта хәлле сауҙагәр булған һәм бик иртә үлгән. Мөхәммәткә алты йәш булғанда әсәһе лә үлеп киткән. Ул – үҙенең олатаһы, Хашим ырыуы башлығы Абу Талиб ҡулында үҫә. 21 йәшендә Мәккәлә йәшәүсе Хәҙисә исемле ҡатындың сауҙа эштәрендә ярҙамсыһы була һәм, күп тә үтмәй, уға

өйләнә. Өйләнәгәндән һуң ул үҙен дини эҙләнеүҙәрәгә арнай. Мөхәммәт йәшәүҙең маҡсаты, мәғәнәһе, йәшәйештең башланғысы тураһында уйлана.

Мөхәммәт тауҙарға сығып яңғыҙы йөрөргә яратҡан ( 9 слайд). 610 йылда, рамаҙан айының бер төнөндә, ул ғәжәп бер төш күрә: фәрештә ниндәйҙер бер төргәк һуҙып: «Уҡы!» – ти. «Мин уҡый белмәйем», – тип яуап бирә Мөхәммәт. Фәрештә уның күкрәген ныҡ итеп ҡыҫа, һәм, бер аҙҙан ысҡындырып, тағы: «Уҡы!» – ти. «Мин уҡый белмәйем», – тип яуабын ҡабатлай Мөхәммәт. Фәрештә тағы уның күкрәгенә баҫа. Мөхәммәт, үлемдән ҡурҡып: «Нимә уҡыйым һуң?» – тип һорай. Шул саҡ төргәктә яҙылған һүҙҙәрҙе ишетә. Мөхәммәт ишеткәнен һүҙмә-һүҙ ҡабатлай.

Уянғас, был һүҙҙәр йөрәгенә үтеп ингәнен тоя. Ул тағы тауға артыла һәм күк йөҙөнән: «Мөхәммәт! Һин – бәйғәмбәр. Мин – Ябраил!» – тигән тауыш ишетә. Күк йөҙөндә аяҡтарын офоҡҡа терәп, төшөнә ингән фәрештә баҫып тора. Мөхәммәт ҡайһы яҡҡа боролһа ла, фәрештә уның алдына килеп баҫа. Бер аҙҙан ул юҡ була.

Тағы ла бер нисә тапҡыр һынағандан һуң Мөхәммәт үҙенең, ысынлап та, Алла кешеһе икәненә ышана һәм Алла һүҙен кешеләргә еткереү юлын эҙләй башлай. (10 слайд). Ләкин ул бик күп ҡаршылыҡтарға осрай. Ырыуҙаштары уны аңламайҙар, алдауҙа ғәйепләйҙәр, тәғлимәттәренән көләләр.

Ләкин ошо ваҡыт Мәҙинә (Йәсриб) ҡалаһы (11 слайд) кешеләре уның Алла кешеһе булыуын танығйҙар һәм үҙҙәренә йәшәргә саҡыралар. Мөхәммәт бәйғәмбәр 622 йылдың 16 июлендә үҙенең дуҫтары һәм уҡыусылары менән Мәккәнән Йасрибҡа китә һәм ошо көн исламдың башы тип иҫәпләнә. Шуға ла мосолмандарҙа йыл һанау ошо көндән башлана һәм Һижрә тип атала. (Һижрә йәки Ай календары 354-355 көндән, 12 айҙан, Миләди йәки Ҡояш календары 365-366 көндән тора. Ай календары Ҡояш календарынан 11 көнгә ҡыҫҡараҡ. Шуның өсөн Һижрә календары үҙгәреүсән) (12-18 слайдтар). Ә Йасриб – Бәйғәмбәр ҡалаһы, йәки Мәҙинә тип атала башлай. Мәмерйәлә улар Ҡөрьән китабын яҙа башлайҙар.

Ғүмеренең һуңғы көнөнә тиклем Мөхәммәт бәйғәмбәр ошонда йәшәй, ул 632 йылда 63-сө йәшендә мәрхүм була. Бында уның тәғлимәттәре үҙаллы дингә әйләнә.

Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең тәғлимәттәре Ҡөрьәндә тупланған.

Уҡытыусы. Ҡөрьән китабын күргәнегеҙ бармы?

Уҡыусы. Эйе.

Уҡытыусы. Бына ул китап (Ҡөрьән китабын күрһәтә.)

Ҡөрьән – ислам диненең иң изге китабы (19 слайд). Ҡөрьән төрлө күләмдәге 114 сүрәнән тора. Ҡөрьәндә мосолмандар өсөн дини йолалар, хоҡуҡи һәм әхлаҡи нормалар, йәшәйеш һәм үҙеңде тотоу ҡанундары тупланған.

Хәҙистәр – Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең Ҡөрьәнгә инмәгән, әммә ҡасандыр халыҡ араһында киң таралған һүҙҙәре (20 слайд). Уларҙы дин әһелдәре халыҡтан йыйып, айырым йыйынтыҡ итеп туплаған. Хәҙистәр йыйынтыҡтарының иң абруйлыһы «Әс-Сәхих» тип атала. Был йыйынтыҡҡа Әбү Абдаллах әл Бохари 16 йыл буйы 600 меңдән ашыу хәҙис йыйып, иң әһәмиәтлеләренән 7563-өн индергән.

Уҡытыусы. Ә хәҙер уҡыусылар Исламдың биш нигеҙе менән танышып китәйек. Дәфтәргә исемдәрен яҙып барайыҡ.

Исламдың биш нигеҙе

1. Шәһәҙәт. (21 слайд) Мосолман фәҡәт Аллаға табынырға һәм Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең Алла исеменән әйткән һүҙҙәренә буйһонорға, Алланың барлығын һәм берлеген танырға тейеш.
2. Намаҙ. (22 - 23 слайдтар) Мөхәммәт бәйғәмбәр үҙе иҫән саҡта уҡ билдәләнгән тәртиптә һәм ваҡытта алып барыла. Намаҙ, Мәккә яғына ҡарап, көнөнә биш тапҡыр уҡылырға тейеш. Һәр намаҙ алдынан тәһәрәт алыу мотлаҡ.
3. Ураҙа. (24 слайд) Бәлиғ булған һәр мосолман рамаҙан айында ураҙа тоторға тейеш. Ураҙаны Мөхәммәт бәйғәмбәр 624-се йылдан башлап индергән. Ураҙа ваҡытында кеше көн яҡтыһында ашауҙан, эсеүҙән һәм күңел асыуҙан тыйылырға тейеш. Ҡараңғы төшөп, аҡ һәм ҡара ептәрҙең төҫө бер-береһенән айырылмай башлағас ҡына ашарға рөхсәт ителә. Сәйәхәтселәргә, яугирҙарға, әсирҙәргә, ауырыуҙарға, хәлһеҙҙәргә, гоманлы (ауырлы) һәм йәш балалы ҡатындарға һәм ғөмүмән, сәләмәтлегенә ураҙа зыян килтерерҙәй кешеләргә ураҙа тотоу мотлаҡ түгел.
4. Хәйер. (25 слайд)Мохтаж кешеләргә хәйер биреү мотлаҡ һанала.

Хаж ҡылыу. (26 слайд) Үҙен мосолман тип һанаған һәр кеше ғүмерендә бер тапҡыр булһа ла  Мәккәгә барып хаж ҡылырға тейеш. Хаж ҡылыу Зөлхизә айында башҡарыла. Хаж ҡылған мосолман башына аҡ салма урау һәм исеменә «хажи» тип өҫтәү хоҡуғы ала.

Уҡытыусы. Ниндәй байрамдарҙы ислам диненең байрамдары тип һанайҙар икән?

Уҡыусы. Ҡорбан байрамы, Ураҙа байрамы, Рәжәп байрамы.

Уҡытыусы. Ураҙа байрамында тағы ниндәй йола үтәлә?

Уҡыусы. Әйенселәү.

Уҡытыусы. Эйе. Һеҙ яратҡан йола ул. Ә хәҙер ошо байрамдарға ентекләп туҡталып китәйек һәм дәфтәрҙәребеҙгә исемдәрен яҙып барайыҡ.

Ислам диненең байрамдары

1. Ҡорбан байрамы. Зөлхизә айының 10-сы көнөнән, Ураҙа байрамынан 70 көн үткәс,  башлана. Был көндә Ибраһимдың Алла хаҡына үҙ улын ҡорбан итергә әҙер булыуы хөрмәтенә ҡорбан малы салалар. Ҡорбанға сала торған малды алдан уҡ һимертәләр һәм буяу йәки мәрйендәр менән айырым билдә һалалар. Бының ғилләһе шунда: ожмахҡа алып бара торған юл Тамуҡ аша һалынған Сират күперенән үтә. Сират күпере – сәстән нәҙек, ҡылыстан үткер һәм ялҡындан ҡыҙыуыраҡ. Хөкөм көнө Сират күпере алдында ҡорбанға салынған малдар йыйыласаҡ, сөнки, кешеләр Ожмахҡа уларға атланып та инә ала. Ҡорбан малына һалынған билдә кешеләргә үҙ малдарын тиҙерәк табырға ярҙам итәсәк. Ҡорбан малының итен ярлыларға  һәм астарға ашатыу мотлаҡ.

Байрам көнө иртәнсәк мосолмандар яңы кейемдәрен кейеп мәсеткә бара, иртәнге намаҙҙан һуң өйҙәренә ҡайталар һәм берәйһендә йыйылып, Ҡөръән һәм мулла тәғлимәттәрен тыңлайҙар. Шунан тағы мәсеткә  йыйылып имамдың  өгөт-

нәсихәттәрен тыңлайҙар. Бынан һуң зыяратҡа барып мәрхүмдәрҙе иҫкә алалар, шунан һуң ҡорбан салалар. Ҡорбан малының итен күмәкләшеп бергә ашайҙар һәм күрше-тирәгә, ярлыларға хәйер итеп бирәләр. Ә ҡорбан малының тиреһен мәсеткә тапшыралар.

2. Ураҙа байрамы. Был байрам рамаҙан айы аҙағында, Шәүүәл айының беренсе көнөндә, ураҙа тамамланғас билдәләнә. Был көндә ярлыларға һәм етемдәргә хәйер таратыла, мәсет ихтыяжы өсөн дә өлөш бүленә. Байрам ваҡытында ҡунаҡҡа саҡырышалар, һәр кем үҙ өйөнән алыҫ китмәҫкә тырыша, сөнки, ул көндә мәрхүмдәрҙең йәне өйгә ҡайта тип иҫәпләнә.

3. Рәжәп байрамы. Рамаҙан айының 27-се көнө билдәләнә. Был төндә Мөхәммәт бәйғәмбәргә Ҡөрьән сүрәләре ебәрелә башлай. Шуның өсөн, ҡәҙер төнөн мәсеттә намаҙ уҡып ҡаршыларға тейештәр.

IV. Йомғаҡлау.

Һорауҙарға яуаптар.

1) Ислам дине ҡасан барлыҡҡа килгән?
2) Кем ул Мөхәммәт бәйғәмбәр?
3) Нисәнсе йылда, ҡайҙа тыуған?
4) Мосолмандарҙың изге китабы нимә тип атала?
5) Ҡөрьәндә нимәләр яҙылған?
6) Нимә ул Хәҙис?
7) Исламдың биш нигеҙен һанағыҙ.
8) Ислам диненең байрамдарына ниндәй байрамдар инә?

V. Өйгә эш. Уҡырға 138-142 биттәр. Ата-әсәләрҙән, ололарҙан дин тураһында мәғлүмәт алырға.